
ВИРТУАЛЬНАЯ КНИЖНАЯ ВЫСТАВКА
РАЙОННАЯ ДЕТСКАЯ БИБЛИОТЕКА


Ура!
Новые книги!
0+

# Рәхмәтуллин С.И.
# Уйларға кәрәк әле

Рәхмәтуллин, С.И. Уйларға кәрәк әле…[Текст]: поэмалар, шиғырҙар, ҡыҫҡа шиғырҙар, тәржемәләр, йомаҡтар, шарадалар / С.И. Рәхмәтуллин. – Өфө: Китап, 2017. – 144 бит.

Авторҙың был китабында ла аҡыллы, тырыш, ярҙамсыл, күпте белергә тырышҡан ҡыҙҙар һәм малайҙар тураһында шиғырҙар урын алған. Йомаҡтар, шарадалар уйланырға ла мәжбүр итер.



# Шакирова Л.И.
# Йылбабай әкиәттәре

Йылбабай әкиәттәре:[шиғырҙар,әкиәттәр, сценарийҙар]/Линиза Шакирова;[рәссамы Майя Зыяи].-Өфө,Китап.2017.-56 б.: цв. ил.

Линиза Шакирова был китабына “Белербай менән Шыуыр”, “Бәпембә”, “Гөлдәр илендә”, “Йылбабай”, “Ураҡкойроҡ”, “Йәмилә”, “Илгиҙәр һәм уның дуҫтары”тип аталған әкиәттәрен, бик күп шиғырҙарын һәм яңы йыл байрамына сценарийҙарын индергән. Әйткәндәй, мәктәпкәсә һәм кесе йәштәге мәктәп балалары өсөн тәғәйенләнгән китапта авторҙың ҡыш тураһында шиғырҙары байтаҡ урын алған.



# Ханнанов Р.Н.
# Салауат ялҡыны

Ханнанов, Р.Н. Салауат ялҡыны [Текст]: шиғырҙар, пьеса, драма/ Рәсих Ханнанов. - Өфө: Китап, 2017. – 88 бит.

Билдәле яҙыусы Рәсих Ханнановтың был китабына архив материалдарына, тарихсыларҙың эҙләнеүҙәренә таянып ижад ителгән башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаев тураһындағы әҫәрҙәре тупланды.



# Мальгинов Е.Л.
# Один день у бабушки

Мальгинов, Е.Л. Один день у бабушки [Текст]: повесть в рассказах/ Евгений Мальгинов. - Уфа: Китап, 2017. – 152 с.

В книге Евгения Мальгинова повествуется о мальчике Савве. Автор относится к своему герою с тонким вниманием, пониманием и сочувствием, подмечает смешные и грустные события, происходящие в его жизни. Рассказы учат быть добрее и внимательнее к людям, просто и доброжелательно относиться к окружающему миру.



# Рәйхан Халисә
# Бал яратам

Рәйхан Халисә. Бал яратам [Текст]: шигырьләр/ Халисә Рәйхан. – Уфа: Китап, 2017. – 48 бит.

Халисә Рәйханның чагу төсле рәсемнәр белән бизәлгән әлеге китабы кече яшьтәге балаларның да, уларның әти-әниләре, дәү әниләре һәм дәү әтиләренең дә күңеленә хуш килер. Матур шигырьләрне укып, нәни дусларыбыҙ бар күңелләре белән хыялый балачак дөнъясына чумарлар, табигатькә, кешеләргә игътибарлырак булырлар, яхшылык белән яманлыкны аерырга өйрәнерләр.



# Мөкәрәмә Садиҡова
# Бәхет ҡанаттары

Бәхет ҡанаттары: [хикәйәләр. әкиәт]:[кесе һәм урта йәштәге мәктәп балалары өсөн]/Мөкәрәмә Садиҡова;[рәс. И.Әхмәҙуллина].-Өфө: Китап,2017.-88 с.: цв.ил.

Яҙыусы-шағирә Мөкәрәмә Садиҡованың әлеге китабын уҡыһағыҙ, Рәшит, Һәҙиә, Юлай, Әлфиә, Булат, Рөстәм, Шамил, Вәсим, Гөлсәсәк исемле бәләкәй малай һәм ҡыҙҙар менән танышырһығыҙ, улар менән бергә ғәжәп мажаралы, мөғжизәле, ҡыҙыҡлы, серле бала-саҡ илендә булырһығыҙ. Бәләкәстәрҙең балалар баҡсаһындағы, мәктәптәге тормоштарын яҡындан белерһегеҙ, уй-кисерештәрен аңларһығыҙ, улар тураһында күп мәғлүмәт алырһығыҙ.



# Мөҙәрис Мөсифуллин
# “Ҡурай иле

Мөҙәрис Мөсифуллиндың “Ҡурай иле” йыйынтығына индерелгән шиғри әкиәттәре һәм башҡа әҫәрҙәре һуңғы ваҡыттарҙа яҙылған әкиәттәрҙән төҙөлгән.

Яңы йыйынтыҡ тәүҙә хикәйәләү характерындағы сюжетлы шиғри әҫәрҙәрҙән тора. Ижадына хас конкрет һүрәтләүҙе яҙыусы һәр әкиәттең поэтик төҫмөрө ярҙамында төпкәрәк йәшерә. Әкиәт жанры аша ситуация шартлылығын һиҙҙерә (“Ялтыртәңкә менән Шаҙрабикә”), боронғо легенда һәм фольклор стиленә мөрәжәғәт итә (“Батша ҡыҙы менән көтөүсе”, “Ҡаһир батша”, “Ханзада мажаралары” һ.б.). Йыйынтыҡҡа ингән һәр әҫәрҙең йөкмәткеһе ысынбарлыҡҡа, йәғни йәшәйешкә, яҡын тора.



# Динә Талхина “Япраҡ йәшергән сер”

Балалар өсөн бик күп шиғырҙар, әкиәттәр авторы Динә Талхинаның “Япраҡ йәшергән сер” китабы кескәйҙәрҙе мөғжизәле әкиәт иленә сәйәхәт итергә саҡыра. Яҙыусының был китабына кесе һәм урта йәштәге мәктәп балалары өсөн “Тылсымлы күлдәктәр”, “Йәйғор тураһында әкиәт”, “Миҙгелдәр”, “Ҡарлуғастар” кеүек һ.б. әкиәттәр, хикәйәләр индерелгән. Китапҡа индерелгән ниндәй генә әҫәрен алып уҡып ҡарама, һәр береһендә тиерлек кеше менән тәбиғәт араһындағы бәйләнеш тасуирлана, миҙгелдәрҙең алмашыныуы, хайуандарҙың, ҡош-ҡорттарҙың, ағастарҙың, сәскәләрҙең, япраҡтарҙың телгә килеүе, ғөмүмән, кешелек донъяһы менән тәбиғәт донъяһының үҙ-ара мөнәсәбәте һүрәтләнә.



# Яҡташ яҙыусылар ижады

12+

# Ҡасимова, М.М. Һуҙыла күректәре

**Ҡасимова, М.М. Һуҙыла күректәре [Текст]: хикәйәләр / Миңнур Ҡасимова. – Өфө: Китап, 2017. – 136 бит.**

**Тормош – яҙмыштар гөлләмәһе. Аллаһ Тәғәлә һәр әҙәм балаһына ғүмер бүләк итеп, бер-береһенекенә оҡшамаған йәшәү юлы һыҙған. Ошо тәҡдирҙе кеше лайыҡлы үтергә тейеш. Хикәйәләремдә шул хәҡиҡәткә йәнә бер ҡат инандырырға тырыштым. Геройҙарым – төрлө холоҡ-фиғелле ауыл кешеләре. Уларҙы тыуған төйәгенә һөйөү, ниндәй генә ауырлыҡтар осрамаһын, һынауҙарға һынмайынса, тормошта үҙ урынын табыуға ынтылыш берләштерә. Әҙәм балаһын йәшәткән иман, өмөт, туғанлыҡ, мөхәббәт, дуҫлыҡ, тоғролоҡ, намыҫ, милли рух төшөнсәләренең мәңгелек ҡиммәт икәнлеген аңлауға үҙ өлөшөмдө индерә алырмын тигән ышаныстамын.**



# Ҡаһарманова М. Күңелем йылы теләй

Ҡаһарманова, М. Күңелем йылы теләй [Текст]: хикәйәләр /Миләүшә Ҡаһарманова. – Өфө: ООО “Самрау-Медиа”, 2017. – 262 бит.

Миләүшә Ҡаһарманованың “Күңелем йылы теләй” исемле хикәйәләр китабында ябай кешеләрҙең тормош-көнкүреше, хәл-ваҡиғалары халыҡсан ябай тел менән бәйән ителә. Әҫәрҙәре йәшәйештең төрлө темаларын сағыу төҫтәрҙә сағылдыра һәм авторҙың һәр ваҡиғаға үҙ ҡарашын билдәләй.




В библиотеку приходи - отлично время проводи!
читать книги, журналы
делать уроки
пользоваться компьютером и интернетом
участвовать в интересных мероприятиях
смотреть выставки
найти нужную информацию
встретиться и провести время с друзьями
«Что можно делать в библиотеке?»



Заходите в гости к нам –
Будем рады мы гостям!
Спасибо за внимание!